*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*



# ШЫРШЫ

***Хикәйә***



Төҫлө ҡағыҙҙарҙы ҡырҡҡылап шыршы уйынсыҡтары яһап мәшәкәтләнгән Галина Петровна тәҙрә сиртеүгә һиҫкәнеп китте. «Донъяла мине иҫенә төшөрөүсе лә бармы ни әле? Кем йөрөй икән һуңлатып … Сирткәс танышылыр». Яурынына һиҙерәй төшкән дебет шәл һалды, ҡаталарын сисеп быйма кейҙе, соланға сыҡты.

— Кем унда?

— Ас әле Галя, ас!

— Нимә йөрөйһөң кеше ҡурҡытып. — Хужабикә һөйләнә-һөйләнә келәне ысҡындырҙы. Туптай итеп кейенгән, тәбәнәк буйлы, йыуан кәүҙәле әхирәте туҡтап та тормаҫтан һалҡын боҫ ағымына эйәреп эскә тәгәрәне.

— Уф аллам, шул тиклем дә алыҫ йәшәмәһәң, килә-килә арып бөттөм, йә маршрут автобусы туҡтаған мәл. — Инеүсе өҫтөндәге ҡыҫҡа тунын, шәлен, йылы итектәрен һалып ташланы ла ҡаталарҙы ҡатып көҙгө ҡаршыһына баҫты, ойпаланыбыраҡ күренгән сәстәрен рәтләштергәс һалҡындан ҡыҙарған табаҡтай биттәрен ыуа-ыуа өҫтәл артына, Галина Петровна ҡаршыһына ялпашты.

— Ғүмер буйы ошонда йәшәйһең, ҡала уртаһынан фатир ала алманың тәки, атҡаҙанлығың ҡороһон. Утын индереп, ағып та хитланмаҫ инең, йылы һыуы ла ҡойолор ине крандан.

— Ваняның алмағас-сейәләрен ташлап ҡайҙа ғына барайым. Йәнә ерҙә соҡонорға, емеш-еләк үҫтерергә яратҡанымды беләһең. Ошонда ғына үлергә яҙғандыр.

— Күрәм, үлергә йыйынмайһың, һиндә генә ут баҙлай, яңғыҙ башыңа нимәләр ҡыйратаһың?

— Ҡатын-ҡыҙҙың хәстәре тауыҡ сүпләһә лә бөтмәй тиҙәрме әле, инша дәфтәрҙәрен тикшереп бөттөм дә, Яңы йыл етте бит, шыршы уйынсыҡтары әтмәләргә мәшғүлләндем дә киттем.

— Улай икән… —Нина ҡабаттан биттәрен, яҫы маңлайын, ҡыҙарған йөҙҙә айырым-асыҡ күренгән һирәк, төҫһөҙ ҡаштарын ыуҙы. — Белмәһә белмәй икән кеше, күпме өгөтләргә мөмкин, йөрөмә шул мәктәптә хәйерсе тиндәренә бил бөгөп, коммерция менән шөғөлләнән, юҡ тигәндә минең эргәмә көнбағыш һатырға ултыр. Һинең ай буйына эшләгән аҡсаңды бер аҙнала алам, беләһең килһә.

— Нина Александровна, һин һәйбәт уҡытыусы булдың, мәғариф алдынғыһы. Уйламағанда-көтмәгәндә мәктәпте ташланың да ҡуйҙың.

— Йә, унда эшләүҙән ни фәтеүә, значогымды тағып ас йөрөйөммө?

— Элек беҙ уҡыусыларыбыҙҙы икенсе ҡиммәттәргә инандыра инек.

— Заманалар үҙгәрҙе, кешеләр ҙә. Дөрөҫ әйттең, элек, ә бөгөнгө уҡыусыларҙы Толстой, Чехов әҫәрҙәре ҡыҙыҡһындырмай, уларға аҡса кәрәк. Бөтәбеҙгә лә аҡса кәрәк!

—Киләсәктә нимәгә табынырбыҙ һуң?

—Ҡабатлап әйтәм, аҡсаға, иман һуңынан!

—Нина, мин сәй ҡуяйым әле, инеп өлгөрмәгәнһең, тын алмаҫтан бәхәскә төштөк тә киттек. — Галина Петровна урынынан ҡалҡынды.

— Кәрәкмәй, Галя! — Әхирәте еңенән тартып кире ултыртты. —Бик күңелһеҙ хәбәр килтерҙем әле ...

Галина Петровнаның йөҙө үҙгәрешһеҙ, тыныс ҡалды, битендәге бер мускулы булһа ла һелкенһәсе.

— Ул ниндәй хәбәр икән тағы? Мин бит фани донъяла юғалтырымды күптән юғалтып бөттөм.

— Бөтмәгәнһең икән шул ... — Нина Александровна һүҙ осон таба алмағандай тотлоҡто. — Бөгөн көнө буйы баҙарҙа һатыу иттем дә кискеһен Любаға барып әйләнәйем тип автобусҡа ултырҙым. Любаны һин беләһең, ғүмере буйы универмагта эшләне, ҡаланың теге осонда йәшәй. Китеп барам, билдәле, юл зыярат эргәһенән үтә. Ҡарайым ...

— Нимә күрҙең инде? —Хәүефле хәбәр ишетәһен һиҙгән Галина Петровна ҡысҡырып уҡ ебәрҙе.

— Һуң, Ваня менән Петяның ҡәберҙәре өҫтөндә үҫкән шыршы зым-зыя юҡ!

— Нимә тинең, Нина,һин яңылыш күргәнһеңдер, ул ҡайҙа булһын! Ҡарауылсы өйөнән уң яҡ иттә, асыҡлыҡта ...

— Яңылышырға әллә ... — Нина Александровнаның тауышы үпкәләгәндәй ишетелде, — автобустан төшөп көрттө йырып барып ҡараным, төбөнән ҡырҡып алып киткәндәр.

— Эһ ... — Галина Петровна ҡуш усы менән йөҙөн ҡапланы. — Һин нимәнелер бутайһың, уға кемдең ҡулы күтәрелһен, урмандағы түгел, ҡәбер өҫтөндәге ағасҡа ...

— Күтәрелгән! Барыр еремә лә аяғым тартмай илай-илай кире боролдом.

Көтөлмәгән яңылыҡтан һеңгәҙәгән Галина Петровна үрһәләнеп ары-бире йөрөштөрҙө лә ҡабаланып кейенә башланы.

— Һин ҡайҙа, Галя?

— Зыяратҡа! Ышанмайым хәбәреңә, күрмәй тороп.

Нина Александровна етеҙ уҡталып Галина Петровнаның ҡулындағы пальтоһын һелкетә тартып алып урынына элде.

— Аҡылдан шашма, һантыйланма. Зыяратта, төн уртаһында, көрттә йөҙөп йөрөргәме иҫәбең? Ҡурҡмай.

— Нимәнән ҡурҡайым, иремдәнме, әллә улымданмы? Иртәме-һуңмы бөтәбеҙ ҙә шунда юлланабыҙ.

— Әммә ике донъя араһындағы күҙгә күренмәҫ кәртәне ваҡытынан алда ашатлау,төндә әруахтарҙың рухын бимазалау — гонаһ!

— Һәммәбеҙ ҙә гонаһлыбыҙ, — Галина Петровна сеңләп илап ебәрҙе, — тик аңлы рәүештә ҡылынған енәйәт башыма һыймай. Нимә эшләргә хәҙер, яратып, яҡындарымдың төҫө итеп тәрбиәләгән һуңғы йәшел ағасымды ла ҡырҡҡандар вәхшиҙәр.

Илауға Нина Александровна ла ҡушылды:

— Әйтмә лә Галя, был ҡәһәр һуҡҡыры донъяла йүнле кеше ҡалғанмы икән? Миңә йәшәүе еңел тип уйлайһыңмы? Тышым көлһә лә эсем тулы ут: эскесе ир, әрәмтамаҡ йүнһеҙ малайымды аҫырайым тип көнө-төнө бил бөгәм, сасҡау һыуыҡ тимәй, буран тимәй шыҡыйып ҡатып көнбағыш һатам бөксәндәп. Аяҡтар туңып бөтә, сарпыуы йөрәккә үтә, ошоғаса барлығын да тоймаған быуындарым һыҙлай. Минекеләр һинекеләр ише дөмөкмәнеләр исмаһам, тынсыр инем.

Нина Александровна үҙ хәсрәтен иҫенә төшөрөп илай ине.

— Һин нимә лыбырҙайһың, йүнһеҙ бисә, ғаиләңә үлем теләргә нисек телең әйләнә? Ихтыярынан тыш ярайһы уҡ тупаҫ һүҙҙәр ысҡындырған Галина Петровна усы менән ауыҙын ҡапланы, шунан йәштәрен ҡоротоп ҡунағына ғәжәпләнеп төбәлде.

— Үҙәгемә үтеп әйтәм, көн да иреш, көн да талаш. Кисә әле ҡайтып инһәм, улыбыҙ Олег бер килке этрәгәләмдәрҙе йыйып теттереп күңел аса. Көнө буйы саҙаҡалай тамған тиндәремде талап тиерлек кеҫәмдән бушатып алды. «Оялмаһағыҙ кәүҙәмде ашатлап сығығыҙ!» тип тупһаға арҡыры яткайным, беренсе булып Олег үтте битһеҙ, шунан йылмая-көлә дуҫтары. Араларында мин уҡытҡан уҡыусылар ҙа бар ине. Әҙәп белмәгән маңҡорттар! Ғәрлек! — Нина Алек-

сандровна тағы ла ярһыбыраҡ иларға тотондо.

Оҙаҡ ултырҙылар. Нина Александровна әхирәтен түгел, киреһенсә, хужабикә ҡунаҡты тынысландырырға тырышты: йыуатты, кәңәштәрен бирҙе. Шыршы ҡайғыһы бер аҙға онотолдо ла шикелле.

— Һөйләштек, инде ҡайтайым булмаһа.

— Әллә йоҡлайһыңмы миндә, һуңлап киттең бигерәк.

— Ҡайҙа инде, иртә менән баҙар ҡапҡаһы төбөнә барып өлгөрөргә кәрәк. Һуңлаһаң, икенсе берәүһе урыныңды ала ла ҡуя. Конкуренция. Байрам алдынан тауар гәҙәттә үтемле була.

Солан ишеге төбөнә килгәс, Нина Александровна киҫәтеп ҡуйыуҙы кәрәкле тапты:

— Миңә ышанмаһаң зыяратҡа иртәгә ҡояш ҡалҡҡас барып ҡарарһың, тик бөгөн түгел. Ни хәл итәһең, ҡырҡҡандар шыршыны. Бола осорҙа ағасты тунау ғына нимә, әҙәм башын өҙөүҙән дә тартынмайҙар, язаһын да алмай йөрөй бирәләр. Заман ахыры етеүе ошолор...

Нина Александровна тапалған ҡарҙы шығырҙата баҫып төн ҡараңғылығына һеңеп юғалды.

Галина Петровна инде лә стена ҡырында торған диванға бөкөрәйҙе. Пружиналары бушап тояҡтары ҡаҡшаған иҫке мебель иләмһеҙ шығырҙап ҡуйҙы, әйтерһең дә хужаһының һыҡтауына ҡушылып шыңшыны. Эшләнә башлаған шыршы уйынсыҡтары, ҡағыҙҙар, елем, энә-еп, ҡайсы кәрәклектәрен юғалтып өҫтәлдә туҙырап яталар. Сисендә лә утты һүндереп һалҡын түшәгенә сумды. Былай ҙа йомшаҡ яҫтығын ҡырамалай-ҡырҡ ҡабартып ҡараһа ла йоҡоһо килмәне, әйләнептулғанғылаңы, тороп, тоҫмал менән һәрмәнеп, шкаф тартмаһынан шырпы табып, мөйөштәге иконаның алдындағы май шәмде ҡабыҙҙы. Уға һынамсыл, тикшереүсән, үтә ҡарай ине иконалағы һүрәт.

Ғүмере буйы атеистик рухта тәрбиәләнгән, башҡаларҙы ла шуға ышандырырға тырышҡан уҡытыусы һуңғы осорҙа танымаҫлык булып үҙгәрҙе. Ҡуңалтаҡ яңғыҙлығынан арынырға иттеме, әллә һөйләшер, кәңәшләшер, серен сисер яҡыны булманымы, баҙарҙа сиркәү кәрәк-яраҡтары һатып тороусы әбейҙән алды ла ҡайтты ошо нәмәне. Ҡурҡмай, йәшермәй, асыҡтан-асыҡ тотоп ҡайтты. Хәҙер килеп бер доға ла белмәгән көйгә үҙенсә табына аллаға, үҙенсә мөрәжәғәт итә.

«Әй аллам, һинең алдыңда гонаһтарым шундай юғарымы?Мине күпме юғалтыуҙарға, һынауҙарға дусар иттең, япа-яңғыҙымды ҡалдырҙың. Ғәйебем нимәлә? Аллаһыҙлығым өсөн ебәрҙеңме ошо язаңды? Минең генә ғәйебемме ни ул, тотош илдең ҡазаһы ...Улым Афғанстанда йөрөгәндә лә ғорурлыҡ тойғоһо кисергән булдым, йәнәһе лә интернационалист әсәһе. Баҡтиһәң, оккупантты тыуҙырған, күкрәк һөтөп имеҙеп, иманһыҙ итеп тәрбиәләгән бахыр кәнтәй генә булғанмын. Янған-көйгән, иҙелгән ят тупраҡ килмешәктәр итеге аҫтында иңрәмәгән, ҡышлағы яндырылған, туғандары үлтерелгән әсә ҡарғамаған тиһеңме...Баламдың ғәйебе ниҙә? Ул бит ябай һалдат ҡына ине, бары мәғәнәһеҙ бойороҡтарҙы үтәгән йәш һалдат, көтөүе менән ят биләмәләргә ҡыуылған аңра өйөрҙең бер вәкиле. Беҙ аҙашҡан, алданған, муйыныбыҙҙан гонаһтарға батҡан быуын, аллам. Кисер...»

Үткәндәре күҙ алдына бөгөнгөләй килеп баҫты.

## 2

1989 йыл. Совет ғәскәрҙәре Афғанстандан сығарыла башлағас шатлыҡтарының сиге булманы. Кемуҙарҙан йүгерешеп мәктәптән ҡайталар ҙа телевизорҙы тоҡандырып уға өмөт менән төбәләләр. Колонналарға теҙелешеп һалдаттар ҡайта, уларҙы гөлләмәләр тотоп бәхетле әсәләр ҡаршы ала.

— Ваня, ҡара әле, бронетранспортер башындағы Петя түгелме? Юҡ, анауҙы, арты менән ултырғанды әйтәм.

— Галя, күрһәткәнең бигерәк сибек, беҙҙең Петр бәһлеүәндәй. Күрҙеңме, боролдо, түгел..

—Улайһа һин машиналарҙы, мин йәйәүлеләрҙе теүәлләйем, бәлки күренеп ҡалыр. Ҡайтырға булғас, хаты оҙаҡлағандыр күрәһең.

Ниһайәт, күперҙә — Борис Громов. Командующий тантаналы ант итә:

«Минең артымда бер совет һалдаты ла ҡалманы!»

Бәхетле мәл. Иваны дәртләнеп бейергә төшөп китә, ул ҡыуанып сәпәкәйләй. Ә Петянан хат килмәне лә килмәне. Уларҙы военкоматҡа саҡырҙы-

лар, эшкә, мәктәпкә шылтыраткандар. Секретарь шул хәбәрҙе әйтте лә ғәйепле кешеләй ашығып китеп барҙы.

Петяны ерләшергә ярты ҡала халҡы йыйылғандыр. Ҡара шәүләләй йөрөнө, һөйләшер рәте лә юҡ, илай ҙа алмай. Ваняһы йәшен һуҡҡан ағастай һерәйгән, өс көн эсендә сәстәре ағарҙы. Бүлмә уртаһында ҡурғаш табут. Ширпы һыҙып бәләкәй генә тәҙрәнән улының йөҙөн һуңғы тапҡыр күрергә итә. Күренмәй. Быяла кисәген онтарҙай була. Оҙатып килеүсе офицер: «Ярамай...», — тип мығырҙай, ҡултыҡлап ситкә алып китә. Һуңғы тапҡыр бирелгән залп һауаға түгел, йөрәгенә атыламы ни! «Ер йотһон һине, ҡәһәрле һуғыш, ҡан-ут көҫәгән сәйәсмәндәрҙең йәне тамуҡта янһын ... Бөтә төр ҡоралға ләғнәт!..»

Ары йәшәүҙәренең ҡото китте. Икеһе ике мөйөшкә текәлеп тик ултыралар. Эшкә баралар. Ваняһы нисектер, ул үҙенең нимә һөйләгәнен үҙе аңламай, уға өмөт менән төбәлгән балаларҙы ғына күрә, нимәлер төшөндөрә, һорай, билдәләр ҡуя. Элеккеләй ләззәтләнеп дәрестәр үткәреү онотолдо. Ял етһә, ире күҙ йәшереүҙе ғәҙәт итеп алды. Өҫтөнә Петяның армияға китерҙән алда алған курткаһын, кәпәсен кейә, ҡатынының үҙенә төбәлеүен тойоп, аңлата:

— Мәрхүмдең кейемен кейеү ҡайғыны еңелтәйә, тип кәңәш бирҙе бер инәй.

Иваны нисә йыл инде диабет сиренән яфалана. Ваҡытында укол яһарға, туҡланырға кәрәк.

— Укол һалайыҡ әле, шунан ашап алырһың. Йөрөргә өлгөрөрһөң.

Тегеһе, өмөтһөҙ ҡул һелтәп, ишеккә йүнәлә. Һуңғы осорҙа ауыҙынан араҡы еҫе лә сыға башланы.

— Эсмә, һиңә ярамай!

— Галечка, мин әҙ генә, күңел көйөгөн йыуыр өсөн генә...

Бер көн бөтөнләй ҡайтманы. Ана килер,бына күренер, тип көтөп тә ала алмағас, төнө буйы бөтә таныштарын йөрөп сыҡты, урамдарҙы һөҙөмтәһеҙ ҡыҙырҙы. Иртәгәһен милиция бүлегендә икәнлеген әйттеләр. Барып камераны асҡанда Ваняһы иҙәнгә ятып кәкрәйеп ҡатҡайны. Уны Петя эргәһенә ерләнеләр.

Аҙна самаһы үткәс, өйөнә милиция начальнигы килде. Ҡултығына әллә күпме ҡағыҙҙар ҡыҫтырған. Элекке уҡыусыһы бит, ҡайғыһын уртаҡлашырға булғандыр. Йыуатты. Хәлбүки һүҙҙәре, ҡыланыштары рыя, яһалма.

— Иван Васильевич эсте шул һуңғы осорҙа, шуның арҡаһында харап булды. Өйөгөҙгә әллә нисә тапҡыр килтереп ҡалдырҙылар. Мин өйҙә юкта йәш егеттәр танымай япҡандар. Лаяҡыл иҫерек, үҙенән ацетон еҫе аңҡый ине, тиҙәр.

— Беҙҙең ҡайғыны һеҙгә яҙҙырмаһын хоҙай. Иван Васильевич ярамағанын белә күрә йотоштторҙо, ләкин бер ваҡытта ла эсеү менән мауыҡманы, Виктор Степанович. — Ул, тыныс булырға тырышып, рәсми яуап бирҙе.

—Һуң, улайһа эскән килеш бер шаҡмаҡ шәкәр таптырып төнө буйы камераның ишеген туҡмап сығыуын нисек аңлатырға?

Ах,бына нисек! Ҡайғыһынан шаңҡып төпсөнмәгәйне шул, табип һығымтаһы яҙылған ҡағыҙҙарҙы уҡымай ғына ҡултамғаһын ҡуйғайны, милиция өсөн ҡулай диагноз яҙылған булғандыр унда, арттарын нығытыу маҡсатында тағы өҫтәгәндәр ана. Һуңғы мәленә саҡлы уны көтөп, ярҙамына өмөт иткәндер Иваны. Ниндәй үкенес!

— Ах, Виктор, шуны ла аңламағандармы һеҙҙең туң баштар. Иван Васильевичтың диабет ине бит. Бер шаҡмаҡ шәкәр уны үлемдән ҡотҡарыр ине!

— Белмәнем, Галина Петровна, ғәфү итегеҙ...

Милиция начальнигы ҡағыҙҙарын ҡыштырҙатып оҙаҡ ултырҙы, йә һөйләшмәй, йә сығып китмәй.

— Виктор Степанович, карьераң өсөн ҡотоң остомо, ҡул ҡуям документтарыңа! Һеҙҙең менән судлашыр, ғәҙеллекте иҫбатлар көсөм ҡалманы минең, закон көслөләр яғында. Тик Иван Васильевичтың исемен аҡ, саф ҡалдырырлыҡ бер генә шарт ҡуям — документтарҙа иҫерек ине тигән һүҙҙәр булмаһын.

— Бөтәһен дә һеҙ әйткәнсе эшләрбеҙ, Галина Петровна. Теләгән йомошоғоҙ менән теләһә ҡайһы мәлдә мөрәжәғәт итегеҙ, һә тигәнсе үтәрбеҙ. Беҙгә бит ваҡытында отчет бирергә кәрәк, шуға ғына килгәйнем.

Бөтәһенән элек документ мөһимерәк...

— Ҡағыҙ йәндәр...

Иртәгәһен инергә ҡыймай тороусыны шәйләгән Галина Петровна асыу менән ишекте асып ҡулын һондо.

— Килтерегеҙ!

— Галина Петровна, һаумыһығыҙ...

Ҡаршыһында иҫке-моҫҡо кейенгән, ҡырынмаған, етен сәсле, ҡаҡса кәүҙәле әҙәм пәйҙә булған имеш.

— Мин һеҙҙе таныманым, нимә кәрәк?

— Бер нимә лә кәрәкмәй. — Улығыҙҙы, ирегеҙҙе ерләгәндә ҡатнаштым, ҡайғығыҙ ауыр икәнен да күреп йөрөйөм. Һеҙ уҡытыусы, шулай бит? Ә мин... бомж.

— Ерләшкән өсөн араҡылыҡ аҡса теләнселәйһеңме?

Егеттең төҫө боҙолдо, шулай ҙа үпкәләүен тышҡа сығарманы.

— Бөтә кешене лә бер ҡалыпҡа һалмағыҙ, бомж да әҙәм балаһы, яҙмыш мине сүплеккә сығарып ырғытһа ла эсемдә сүп-сар йөрөтмәйем. Башҡа ярҙам итер сарам юҡ, һеҙҙең рөхсәтһеҙ ирегеҙҙең, улығыҙҙың ҡәберенә шыршы алып барып ултырттым. Матур, күркәм шыршы, ҙур уҡ булһа ла тамырын зарарландырмай ҡаҙып алдым. — Ул ҡанлы, урын-урыны менән ҡабарсыған устарын алға һондо.

— Рәхмәт улым, рәхмәт изгелекле бала... Исемең нисек һинең?

— Павел Левашов тиҙәр мине.

### 3

Йоҡоһонан иртә уянды Галина Петровна. Тышта ҡараңғы ине әле.

Ашағыһы, эскеһе килмәһә лә өҫтәлгә һыйҙарын теҙҙе. Шулай тейеш. Ашамлыҡтарының тәмен тоймай ғына ҡапҡыланы, өҫтәлен йыйыштырҙы, кейенеп тышҡа сыҡты. Көн һалҡынайтып ебәргән, һауа тынды ҡурып алып бара: пальтоһының яғаһын күтәрҙе, шәл сите менән ауыҙын томаланы. Автобус туҡталышына боролмайынса йәйәү атланы.

Зыярат ғәҙәти һиллеге менән ҡаршы алды. Һуңғы көндәрҙә йөрөмәгәндәрҙер, ҡарауылсының өйөнә генә юл һалынған, ҡалған тирә-яҡ ҡарға күмелгән. Ана, ике эҙ ярылып ята. Эре аҙымлағаны, арҡыры-торҡороһо уғрыныҡылыр, бынауһы, ваҡ-ваҡ ҡынаһы — Нина Александровнаныҡы. Ҙур ҡәбер рәшәткәһе, Петя менән Ваня йәнәш яталар. Шыршы юҡ, бысып алынған. Төпһәнән күҙ йәштәрелəй төҫһеҙ сайыр һығылып күренә...

Галина Петровна тағы ла көсәйә төшкән һалҡынды тоймай атланы ла атланы. Һауа етмәгәндәй, пальтоһының өҫкө төймәһен ысҡындырҙы, шәле артҡа шыуҙы, салланған сәстәре елдә туҙыраны. Әллә кемдәр сәләмләп уҙалар. Бәләкәй ҡала булғас, таныусылар күп шул.

— Галина Петровна, яҡынлашып килгән Яңы йыл менән!

— Ә-ә-ә, Павел Левашов, һаумы улым.

Егет һуҡмыш ине, ҙур танауы бурҙаттай ҡыҙарған, ситтәренә эрен ҡатҡан ташбыҡ күҙҙәр ҡаймаҡ ялаған бесәйҙекелəй йылтырап ҡарайҙар, йәйенке ауыҙынан һалҡын боҫҡа эйәреп зәһәр самогон еҫе аңҡый. Петяның курткаһы берәҙәктең йоҡа кәүҙәһендә һалынып күренә, кәпәсе таман икән былай. Таныш, ҡәҙерле кейемдәр йөрәген һыҙлатты.

— Байрамды иртәләгәнһең түгелме? — тине лә Галина Петровна, шелтәләүҙе килештермәй өҫтәне: — Йоҡа йөрөйһөң бигерәк. Ни эш бөтөрәһең?

— Беҙ һәр ваҡыт йылынып йөрөйбеҙ, шунһыҙ ярамай, йәнә ҡымғырлаһаң өшөтмәй, вагон бушатып ҡайтып киләм. Байрам яҡынлаша бит, аҡса кәрәк. Өйһөҙҙәр ҙә табын ҡорорға хаҡлылыр моғайын. — Павел шырт баҫҡан йоҡа сикәләрен ыуҙы, тәмәке ыҫынан һарғайған тештәре араһынан сертләтеп төкөрөп ҡуйҙы, донъяһы теүәл кешеләй, ғәмһеҙ йылмайҙы.

— Ҡайҙа йәшәйһең һин?

— Яҙғаса төҙөүселәрҙең дөйөм ятағынан мөйөш алдыҡ, унан күҙ күрер. Ә һеҙҙең хәлдәр нисек, Галина Петровна?

Һытылырға торған ҡатын иланы ла ебәрҙе:

—Павел, һин алып ҡайтҡан шыршыны урлап киткәндәр кисә. Һуңғы ике йылда ерһенеп, ҡупшыланып ҡына киткәйне...

—Нимә? —Көтөлмәгән яңылыҡтан Павелдың ҡалын, тоташып тиерлек үҫкән ҡаштары юғары сөйөлдө, ул, ниҙер хәтерләргә тырышҡандай, аҫҡы иренен тешләп уйланып торҙо. — Шулаймы?.. Әһә, был һинең генә эшең, шакал! Ҡыҙмаса килеш еңел табыш, алыш-биреш тапҡанына маҡтанғайның... Йәнеңде алмаһаммы.

Ул йүгерә-атлай китеп барҙы.

— Павел, йөрөмә ҡыуалатып, ҡылынаһы гонаһ ҡылынған, бәләгә тарырһың!

Левашов күҙҙән юғалғайны инде.

Ул торараҡ килде: уң яҡ күҙ төбө күгәреп сыҡҡан, сикәһе һыҙырылған, еңелсә ярһыған.

— Шул булған. Анау, ҡалала магазиндар тотҡан коммерсантҡа араҡыға

һатҡан. — Таныш фамилияны әйтте. — Иманын уҡыттым, башҡаса йөгөноп йөрөмәҫлек иттем. — Йыуатҡандай өҫтәне. — Ә шыршыны икенсе йыл көҙ тағы алып килеп ултыртырмын. Теге урында икенсеһе, матурырағы бар әле.

Шул мәлдә өй эргәһендә генә милиция машинаһының сиренаһы олоп ебәрҙе, дөбөрҙәп йүгергән аяҡ тауыштары ишетелде, ишек шар асылды, команда яңғыраны:

—К стене, руки за голову, ноги на ширине плеч!

Павелды тентей башланылар.

— Ҡоралы юҡ, иптәш лейтенант.

— Кешене ҡанға батырып туҡмаған да, эҙ яҙлыҡтырырға була ҡасып килгән ҡәбәхәт, тапмаҫтар тип уйланыңмы?

— Ул кеше түгел, хайуан, ә ҡушаматы — йыртҡысыстыҡы. Әҙерәк эләккәнгә шөкөр итһен.

— Молчать! — Лейтенант күнегелгән алым менән Павелдың бөйөрҙәренә усының ҡабырғаһы менән тондорҙо.

Левашов бөгөлөп төштө.

— Өй баҫып инергә һеҙҙең хаҡығыҙ юҡ! — Галина Петровна әле генә иҫенә килде.

— Ә һин тик кенә ултыр...

— Галина Петровна тиҙәр мине.

— Эйе, хөрмәтле әбей...Әгәр беҙ ниндәй ҙә булһа законды боҙһаҡ, ялыу яҙа алаһығыҙ. Милиция исеменә... Инеүселәр хахылдашып көлөп ебәрҙеләр.

— Сығып китегеҙ өйөмдән!

— Әлбиттә. — Лейтенант күҙҙәренең ағын әйләндереп Павелға аҡырҙы. — Кейен тиҙерәк, юғиһә тағы өҫтәйем.

Милиционерҙар этеп-төртөп Левашовты алып сығып киттеләр.

## 4

Кис еткәс, ғауғаланған күңеленә урын таба алмаған Галина Петровна ҡәтғи ҡарарға килеп йыйынды ла ҡала үҙәгенә ҡарай атланы.

Яңы йыл тантанаһы иртә башланды быйыл. Ни тиһәң дә яңы быуатҡа аяҡ баҫа Ер халҡы, йылдағыны ҡабатламай иҫендә ҡалырлыҡ итеп байрам иткеһе килә. Ҡайҙа ҡарама төрлө төҫтәге уттар бер янып, бер һүнеп, күҙ ҡыҫып сәләмләйҙәр, үҙәктә урынлашҡан супермаркет үҙенә саҡыра. Бында сауҙаны ҡайһылай ҙа киң йәйелдереп ебәргәндәр, ҙур ҡалаларҙы әйтәһе лә түгелдер. Кеҫәһендә икмәк, һөтлөк кенә аҡсаһы сылтырлаһа ла кереп һый-нигмәттәрҙән һығылған рәттәр буйлап китте: аҫыл көньяҡ емештәре, саф йәшелсәләр, ҡиммәтле һуттар, эсемлектәр ымһындыра. Уларҙың бер төрөн алыуға ғына ла сумырып аҡса китәсәк. Затлы кейем кейгән ҡалын кеҫәлеләр алалар төрлөһөн һайлап. Толҡа тапмай кире сыҡты. Арыраҡ майҙанға, боҙ һындар уртаһына матур биҙәлгән шыршы ҡуйылған, халыҡ апаруҡ ҡына күренә. Боҙ тауынан шау-гөр килеп бала-саға шыуа.

Ситкәрәк ҡыҙ бала баҫҡан да тиҫтерҙәренең осоноуын күҙәтә. Алтынсы класта уҡыған Светлана Новикованы таныны.

Әҙәбиәт дәресендә таҡта янында яуап биреүсе Новикова сайҡалып китте лә стенаға йәбешеп иҙәнгә шыуып төштө, йөҙө ҡағыҙҙай ағарҙы.

Галина Петровна ҡыҙға ташланды, шымтайып ҡалған уҡыусыларына әйтә һалды:

— Балалар, тиҙ генә медпункттан апайығыҙҙы саҡыртығыҙ!

Эйелеп ҡыҙҙың иҙеүен ысҡындырҙы, арҡандай һалынған нәҙек ҡулды тотоп пульсты табырға маташты.

Тиҙҙән килеп еттеләр, ҡыҙҙы сығарҙылар.

Тәнәфес ваҡытында шәфҡәт туташы Галина Петровнаны үҙе эҙләп тапты.

— Светаның хәле нисек, һеңлем?

— Хәле тип... Артыҡ ярҙам кәрәкмәй уға. Бала ай буйы йүнләп ашамай икән, мәктәптәге аш менән генә йән аҫырай. Әсәһе инвалид, атаһы үлгән...Ниндәй кешеләргә әүерелдек беҙ, Галина Петровна, балаларыбыҙ асыға, беҙ шуны ла белмәйбеҙ. Инвалид аҡсаһы икмәк алыуҙан үтмәйҙер. Бахыр, хәйерсе Рәсәй, граждандарын яҡлай, һаҡлай, әҙәмсә ашата алмаған көйгә юғары кимәлдә кеше хоҡуҡтары тураһында фәлсәфә һатып лаф орған була...

— Света, Света Новикова, кил әле бында! — Галина Петровна ҡыҙҙы саҡырҙы, тегеһе яҡынлағас, арҡаһынан ҡаҡты:

— Нисек, тау шыуыуы күңеллеме?

— Мин ҡарарға ғына килдем.

— Иртәгә нимә эшләйһең?

— Әлләсе. Больницаға, әсәйем янына барырмын да өйҙә ултырырмын. Бәлки тағы тау шыуыуҙарын күҙәтермен.

— Миңә кил әле, йәме. Ҡайҙа йәшәгәнемде беләһең бит. Бөгөн байрам алды, ә ысын байрам иртәгә башлана. Шыршы һатып алырмын, шуны биҙәрбеҙ, билмән эшләрбеҙ, бәлеш бешерергә өйрәтәм. Ә әсәйеңдең хәлен икәүләп белербеҙ. Килерһеңме?

— Ә мин ҡамасауламаҫмынмы?

— Килеһенсә, бик күңелле буласаҡ. Китапханамда китаптар күп, теләгәнеңде һайлап алырһың. Яңы йылға бүләгем шул булыр.

Ҡыҙ ҡыуанып йүгереп китте.

Бына ул төбәп килгән ер. Туғыҙ ҡатлы йорттоң икенсе ҡатындағы дүрт бүлмәле фатирҙың зал тәҙрәләре урамға ҡараған. Унда булғаны юҡ уның. Света Новикова менән йәнәш ултырған Зоя Корягинаның яҙған иншаһы буйынса ғына таныш: залда — фортепьяно, сит ил телевизоры, йомшаҡ, затлы диван, креслолар, ҡыҙыл ағастан эшләнгән мебель, иҙәндә — эшкәртелгән айыу тиреһе.

Тәҙрәләрҙәге ебәк ҡорғандар аша ҡунаҡтарҙың шәүләләре төҫмөрләнә. Байтаҡ тапанды ул бер урында, аяҡтағы сәңкеүен тойҙо, бында ниндәй маҡсат менән килеүен дә белмәй һенағастай тороуында булды.

— Галина Петровна!

Кемдер артынан ҡосаҡлап алды. Боролғайны, спорт костюмы кейеп алған Зоя Корягинаны күрҙе. “Ҡыҙҙың биттәре уттай яна, күҙҙәре осҡонланған.

— Зоя, һуңғараҡ ҡалғанһың түгелме?

—Беҙ тауҙа шыуҙыҡ, эй ҡыҙыҡ унда, эй ҡыҙыҡ. Һеҙ Света менән һөйләштегеҙ, мине абайламанығыҙ ҙа.

—Бар, инә һал. Һалҡын тейер.

—Әйҙә икәүләп керәбеҙ. Беҙҙең өй тулы ҡунаҡтар. Араларында һеҙҙең элекке уҡыусыларығыҙ ҙа бар икән, һағынып һөйләп ултырҙылар мин барҙа. Хәҙер сюрприз яһайбыҙ, аптыратабыҙ уларҙы.

— Зоя, уңайһыҙ нисектер, икенсе ваҡыт, йәме.

Уҡыусыһы башҡаса өгөтләмәне, етәкләп алды ла китте.

Инделәр. Залдағы шау-шыу, сәнске, бысаҡтар сыңы, рюмкалар сәкәшеүе бында ла айырым-асыҡ ишетелә.

— Быҕаса ҡайҙа йөрөйһөң юғалып? — Еңел хәрәкәтле ҡатын сыҡты. — Марш, кухняла ашап ал да бүлмәңдә бул. Әйткәндә ҡунаҡтарға пианинола уйнап ишеттерерһең. — Ҡыҙының яңғыҙ түгеллеген абайлағас, кем һин, нишләп йөрөйһөң, тигәндәй инеүсегә төбәлде.

— Әсәй, таныш бул, Галина Петровна, беҙҙең әҙәбиәт уҡытыусыһы.

Булһа һуң, тигәнерәк ҡараш йәнә баштан аяҡҡа ҡәҙәр һөҙҙө.

— Һаман танымайһыңмы, атайымдың яратҡан уҡытыусыһы, беләһең килһә!

Атай, һүҙен ишеткән йорт хужаһы күренде. Ҡыҙмаса булып алған.

— О-о-о, кем килгән беҙгә, Галина Петровна, ҡәҙерлем минең!— Айыуҙай ир сибек кенә ҡатынды ҡосағына йомарланы.

— Һаумыһығыҙ, Вячеслав Федорович...

— Һеҙҙең өсөн мин бары Славик ҡына, бары Славик. Өҫ кейемегеҙҙе һалайыҡ, табынға үтәбеҙ!

Көсләп тиерлек ҡунағын сисендерә башланы. Хужабикә лә теремекләнде:

— Эйе, эйе, сисенегеҙ. Кейемегеҙҙе бына бындараҡ ултырғысҡа ғына һалығыҙ, артыҡлап оҙаҡ ултырмайһығыҙҙыр бит, алыуға шулай ҡулайлыраҡ булыр.

Ҡунаҡты өҫтәл артындағылар шаулашып ҡаршы алдылар:

— Галина Петровна, етеп килгән Яңы йыл менән!

— Бына исмаһам шатлыҡ!

— Хәтерләп кенә ултыра инек.

Юғалыңҡырап ҡалған Галина Петровна иң башта бүлмәне йәмләгән, уйынсыҡтарға күмелеп төрлө төҫтәрҙә янған шыршыға ҡараны, «ҡырҡҡандар һине, бер-ике көндән сығарып та ырғытырҙар», тигәнерәк уй күңелен тырнаны, ары ҡарашы ашамлыҡтарҙан һығылған өҫтәл тирәләп ултырған кәнәғәт, ҡыҙарған йөҙҙәрҙе теүәлләне. Уйламағаныраҡ һүҙ ҙә ысҡындырҙы:

— Һаумығыһыҙ балалар...

Рәхәтләнеп көлөп ебәрҙеләр. Хужа аяғүрә баҫты. Уның хөрмәтенә рюмкаларға затлы шарап тултырылды, тик ҡотлау береһе икенсеһен уҙҙырырға тырышып күркәләй ҡабарған, үҙҙәренең юҡҡа ғына саҡырылмауҙарын белгән төп ҡунаҡтарға йүнәлтелгәйне.

— Хөрмәтле ҡунаҡтар! — тине хужа үркәсле эйәген абруйлы һелкетеп. Башҡалар тынып ҡалғас дауам итте. — Бик тә тарихи мәлдә йәшәйбеҙ, иҫке быуатты ослап егерме беренсе быуатҡа аяҡ баҫабыҙ. Ниндәй булыр һуң килер быуат? Билдәһеҙ. Ләкин шуға иманым камил — ул көслө кешеләрҙең ҡулында буласаҡ, байлыҡтарын ишәйтә белеүсе, тырыш, эшҡыуар ке-

шеләр ҡулында. — Галина Петровна яғына ҡайҡайҙы. — Беҙ мәктәптә Чернышевскийҙың «Нимә эшләргә?» әҫәрен уҡыныҡ, һәм әйтер инем, дөрөҫ һығымта яһағанбыҙ шикелле. Беҙгә Вера Павловна ише төштәр күреп һаташып ятырға түгел, хәрәкәт итергә кәрәк. Ә унда яҙылған гәҙеллеккә килгәндә, Чернышевский менән килешә алмайым. Минеңсә, кемдең ҡулында власть — шул гәҙел кеше була. Шуның өсөн беҙгә берләшеү фарыз: закондар ҙа беҙҙең файҙаға сыҡһын, кәрәк мәлдә милицияһы ла яҡлаһын. — Күбәләй йәйелгән Виктор Степанович яғына ҡарап хәйләкәр күҙ ҡысты. Уныһы сәнскеһен ҡыҙыл балыҡтың арҡаһына бөтөргәнсе ҡаҙап алып алдына һалды ла ауыҙын ҙур асып шапылдап ашарға керешеп китте. Ҡатыны һиҙҙермәй генә иренең ҡабырғаһына төрттө. Милиция начальнигы битарафыраҡ ҡиәфәттә булһа ла тыңларға мәжбүр булды. — Шулай итеп был тосты һеҙҙең хөрмәткә тәкдим итәм, ҡөҙрәтле уҙамандар!

— Некрасовтың «Кемгә Русьтә йәшәүе рәхәт?» поэмаһындағы атаҡлы шағирҙың һорауына мин шулайыраҡ итеп яуап бирер инем: Рәсәйҙә йәшәүе беҙгә рәхәт, бына шул! — Һалым идараһында эшләүсе һонтор кәүҙәле Волков әсе тауышланып ҡысҡырып ебәрҙе, бутап күршеһенең ярым эселгән рюмкаһын ауыҙына түңкәрҙе.

Мәжлес ҡыҙғандан-ҡыҙҙы, башта аҡыллыраҡ яңғыраған һүҙҙәр тоҙһоҙланды, маҡтау, маҡтаныу, саманы белмәҫ, лөғәткә һыймаҫ шапырыныу китте. Өҫтәл мөйөшөнән урын алған Галина Петровна бөтөнләй ишек яғына ҡарай ҡыҫырыҡланды, уның барлығын да иғтибарға алманылар.

Инде нимәһе менән маҡтанырға белмәгән хужа өҫтәлгә һуҡты:

— Зоечка, ҡыҙым, сыҡ, пианинола уйнап ишеттер. Хәйерсеhәр өйөндә булмаған музыка ҡоралы бар миндә, белегеҙ, штамповка түгел был, әллә күпме аҡса түгеп Мәскәүҙән ҡайтарылған, вот!

Әсәһе көсләп тиерлек ҡыҙын алып сыҡты. Уныһы һаман ҡарышты:

— Әсәй, кәрәкмәй, кәйефем юҡ.

Ҡунаҡтар ныҡыша башланылар:

— Йә инде, ҡыуандыр беҙҙе.

— Оҫта пианистка икәненде ишетеп беләбеҙ.

— Һорайбыҙ!

Зоя яҡлау өмөт итеп Галина Петровнаға ҡараны.

— Уйна, һорайҙар бит.

Зоя ҡысҡырып әйтте:

— Мин уҡытыусымды яҡынлашып килгән Яңы йыл менән ҡотлайым һәм уның хөрмәтенә уйнайым!

Махсус музыка мәктәбендә уҡыған Зоя Корягина ысынлап та оҫта уйнай ине. Тилбер бармаҡтары клавишалар өҫтөндә ышаныслы, етеҙ йүгерҙеләр, ҡатмарлы классик партияны ла еңел, еренә еткереп башҡарҙы.

Гөрләтеп ҡул саптылар. Маһайған Корягин сығырынан сыҡты, шәшке бүреген килтереп төбөнә ҡағыҙ аҡса ташланы:

— Был минән һеҙгә бүләк, Галина Петровна!

Волков бүректе рәт буйлап йөрөтә башланы. Ҡатындарҙың ҡомһоҙ, һаран ҡараштары ирҙәрен өтһә лә тегеләре хужанан ҡалышырға теләмәнеләр, һуҡмыш йомартлыҡ менән ҡағыҙ аҡсалар ырғытыуҙарында булдылар.

— Волков әфәнде, һин үҙең һалырға оноттоң түгелме? Тағы ла иҫкәрмә — был аҡсаларниндәй ҙә булһа һалымдан азат, шуны маңлайыңа киртеп ҡуй.

Һалым начальнигына көлөүселәргә ҡушылған булып буйһоноуҙан башҡа сара ҡалманы.

Бүрек өҫтәлде урап сығыуға унда байтаҡ ҡына аҡса йыйылғайны. Галина Петровна баҫты, былай ҙа бөхтә килдәгенең итәген тартыштырҙы, тамағын ҡырҙы:

— Әфәнделәр ... Бынан ике мең йылдар тирәһе элек бер дәүләт башлығы былайыраҡ итеп әйткән имеш: «Заманалар боларҙы, ерҙән ҡот ҡасты, дәүләт менән идара итерлек аҡыллы кешеләр ҙә ҡалмай бара. Тағы ла ике йөҙ йылдан һуң нимә булыры билдәһеҙ...». Аллаға шөкөр, өсөнсө мең йыллыҡҡа аяҡ баҫтыҡ, күрәбеҙ,теге дәүләт башлығы хаталанған, ерҙә аҡыллы кешеләр бөтмәгән әлегә. Донъяны ла матурлыҡ, гәҙеллек, миһырбанлыҡ тотоп тора минеңсә, тотоп ҡына ҡалмай, әйләндерә лә. Әгәр хәтерләһәгеҙ, язалауҙарға, мыҫҡыллауҙарға дусар ителгән, ҡарт, ауырыу, көсһөҙ Галилей иң һуңғы мәлдә тубыҡланған еренән ҡалҡып ваз кисеү урынына: «Барыбер Ер әйләнә...», тип ҡысҡырған. Барыбер Ер әйләнә, әфәнделәр... Ә бөгөнгө хәтәр осорға килгәндә, үтер, донъя ҡуласа... —Мин бер ваҡытта ла иҫкелеккә сат йәбешеп ятҡаным булманы, ләкин һәр үҙгәреште алҡышлап

ҡаршыларға йыйынмайым. Ниндәй ҙә булһа яңылыҡтың, башланғыстың нигеҙендә демократик принциптар ятырға тейеш, шунда ғына ул йәмғиәткә файҙа килтерәсәк. Изоп теле менән кинәйәләп әйттем, аңларға тырышығыҙ.

Бай табынығыҙҙа һыйландым, ризыҡтарығыҙҙан ауыҙ иттем. Рәхмәт. Ләкин бүләккә йыйылған аҡсаны ала алмайым. Ғәфү итегеҙ һәм дөрөҫ аңлағыҙ. — Аптыраулы ҡараштарҙы тойоп тауышын көсәйтте. — Әгәр ысынлап та миңә бүләк эшләгегеҙ килһә, үтенестәрем бар ине. Беренсеһе — Виктор Степанович һеҙгә. Онотмаһағыҙ, минең теләһә ниндәй йомошомдо ла үтәргә вәғәҙә биргәйнегеҙ. Ошо юлы ғына риза итегеҙ ҙә башҡаса борсомам. — Милиция начальнигы башын баҫты. — Урынһыҙыраҡ булһа ла шуны һорайым, ун биш тәүлеккә ябылған Павел Левашовты сығарығыҙ, ышанығыҙ, уның ғәйебе юҡ. Әгәр штраф түләргә кәрәкһә, аҡсаны бынау кәпәстән алырға мөмкин. Икенсе үтенесем — өй хужаһына. Бүләккә ошо шыршыны бирегеҙ, Вячеслав Федорович. Бәлки сәйерерәк тә ишетеләлер, тик аңлағыҙ, бик ҡәҙерле ул минең өсөн, ябай ағас ҡына түгел...

Көптәрҙең күҙҙәре түңәрәкләнде, өй хужалары шаңҡып ҡалды.

Беренсе булып Вячеслав Федорович телгә килде:

— Хөрмәтле Галина Петровна, ҡалалағы бөтә шыршылар ҙа бер иш инде. Ундай шыршыны, хатта матурыраҡты, иртәгә өйөңә үк килтереп ҡуйырҙар, аҡсаһын түләрмен.

— Миңә фәҡәт ошо кәрәк...

Өй хужабикәһе һөжүмгә күсте:

— Галина Петровна, һеҙ әҙәп сиген сыҡтығыҙ түгелме? Саҡырылмайынса, әрһеҙләшеп килеп табыныбыҙҙа ултырыуығыҙ ҙа етмәгән, өйҙөң, байрамдың йәмен алып сығып китергә итәһегеҙ. Иртәгә Яңы йыл. Мин әйтер инем, был әрһеҙлек, оятһыҙлыҡ!

— Настя!

— Тыйма, былай ҙа оҙаҡ сыҙаным. Был ҡылығығыҙ ГУНО начальнигына барып етәсәк һәм тейешле сараһы күреләсәк, белегеҙ уны!

— Ғәфү итегеҙ, берүк, мәжлесегеҙҙе боҙорға теләмәгән инем. Осраҡлы индем шул, бәлки кәрәкмәгәндер ҙә. Матур байрам итегеҙ. Һау булығыҙ. — Галина Петровна ғәйепле йылмайҙы ла сығыу яғына атланы.

**5**

Сәйер төш күрҙе Галина Петровна. Ишек алдына шыршыһын ултыртҡан имеш, ап-аҡ ҡағыҙҙан эшләнгән уйынсыҡтарын элгән. Уйынсыҡтар шул тиклем күп: елдә осалар, һауала өйөрөләләр, ерҙең өҫтөн ябалар.

Шыршы тирәләй әйләнеп ул, Павел, Света, Зоя, Нина Александровна бейеп йөрөйҙәр. Павелдың өҫтөндә смокинг, хәрәкәттәре итәғәтле, килешле. Нина Александровна ғына элекке ҡиәфәтендә, ҡулындағы тоҡтан тирәяҡҡа услап-услап көнбағыш һибә нишләптер. Усламдарҙан ҡарҙа ҡара таптар хасил була.

Бер яҡтараҡ өйкөлөшөп кисәге табындағылар баҫҡан. Виктор Степановичтың ҡулында шаҡмаҡлы шәкәр, ул уны Галина Петровнаға һона ла ниҙер әйтергә итә. Вячеслав Федорович менән Настяның йөҙҙәре борсоулы: «Нимә эшләргә, нимә эшләргә беҙгә?» — тип үрһәләнәләр. Волков йыуылмаған тәрилкәләр күтәреп сыҡҡан, үҙе: «Беҙгә Русьтә йәшәүе рәхәт!» — тип ҡысҡыра, тәрилкәләрҙең төбөн ялай.

Уянып китте. Шаҡыйҙар икән. Ишек ауыҙында өҫтәренә ҡар бөртөктәре ҡунған, йөҙҙәре алланған Света менән Зоя торалар. Зояның ҡулында кисәге шыршы.

— Галина Петровна, был һеҙгә...

— Рөхсәт иттеләрме һуң?

— Шыршыны балалар өсөн алалар һәм ҡуялар. Ул минеке! Атай-әсәйемдең кисәге ҡылыҡтары өсөн ғәфү итегеҙ, улар хаҡлы түгел. Барыбер Ер әйләнә...

Ҡыҙҙар яҡын итеп, яратып уҡытыусыһына төбәлде.

Әкрен генә ябалаҡлап яуған ҡар көсәйә төштө, тирә-яҡ тағы ағара, яҡтыра, сафлана барҙы...

*2001 йыл, Сибай ҡалаһы.*